# Ынйылар

*Бәләбәй ҡалаһы Башҡорт гимназия – интернаты гәзите № 8 (115), май 2019 й. Махсус сығарылыш*

## *Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының төбәк-ара конференция делегаттарын сәләмләйбеҙ!*



“…Беҙгә нисек ололарҙы, балаларҙы башҡорт теленә өйрәтергә? Эффектив өйрәтергә? Беҙҙең башҡорт телен өйрәтеүҙе нисек яңы, ябай методикалы, һөҙөмтәле итергә? Нисек башҡорт телен өйрәтеүҙе, башҡорт телендә һөйләшеүҙе модалы, заманса итергә? Тағы ла бер фекер бар, кеше башҡортса бер генә һүҙ белһә, беҙ уны үҙ итәйек, уны ситләштермәйек. Шуны ла әйтергә уйлайым. Һеҙ ҡурҡмағыҙ, беҙ – бергә! Был ҙур эште бергә эшләргә кәрәк…”

***Башҡортостан башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың сығышынан***



БӘЛӘБӘЙ РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫ ХАҠИМИӘТЕ БАШЛЫҒЫ СӘХӘБИЕВ АЗАТ АЛЬВЕРТ УЛЫ

“...Юҡҡа ғына “Белемлелек-яҡтылыҡ, наҙанлыҡ-ҡараңғылыҡ”, тип әйтмәйҙәрҙер халыҡта. Башҡорт теле һәм әҙәбитәле уҡытыусыларының яҙмышы – ил, тел, халыҡ яҙмышы менән бер тамырға барып тоташа. Ошондай форматта ойошторолған башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының конференцияһы педагогтарҙы борсоған көнүҙәк проблемаларҙы хәл итеүгә йүнәлтелгән етди, башҡорт халҡы өсөн әһәмиәтле, тарихи сара. Ысынлап та, был йыйындың бурысы башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыу проблемаларын хәл итеү генә түгел, ә халыҡты, мәҙәниәтте, илде һаҡлау. Сөнки уҡытыусылар балалар белеме өсөн генә түгел, ә халыҡ киләсәге өсөн дә яуаплы...”



БӘЛӘБӘЙ РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫ МӘҒАРИФ БҮЛЕГЕ ИДАРАЛЫҒЫ МУНИЦИПАЛЬ ҠАҘНА УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ НАЧАЛЬНИГЫ ЛАВРОВА НАТАЛЬЯ ВЛАДИМИРОВНА

“...Туған телдә бишек йырын ишетеп, халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәренен, йолаларын белеп үҫкән бала бәхетле. Балаларға кесе йәштән тел ҡәҙерен аңлатыу мотлаҡ. Туган телде һәм милли йолаларҙы һаҡлауҙа һәм үҫтереүҙә ғаиләнен роле бик ҙур, тип әйтмәксемен.

Ә уҡытыусыларға инде туган телгә булған ихтирамды, ғорурлыҡ тойғоһон артабан тәрбиәләү, ныҡлы белем биреү, һәләттәрен үҫтереү, тәртипле, төрлө яҡтан үҫешкән йәмғиәткә файҙалы шәхес тәрбиәләү кеүек маҡсаттар ҡуйылған...”



БӘЛӘБӘЙ РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫ МӘҒАРИФ БҮЛЕГЕ ИДАРАЛЫҒЫ МУНИЦИПАЛЬ ҠАҘНА УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ ТУҒАН ТЕЛДӘР БУЙЫНСА БЕЛГЕСЕ ГӘРӘЙЕВА СВЕТЛАНА ХӘТИП ҠЫҘЫ

Юғары үҫешкән йәмғиәттең киләсәге – бөгөнгө уҡыусылар ҡулында. Үҙ халҡын, милләтен, телен һаҡлаған, ихтирам иткән, шул телдә уйлаған, ижад иткән кеше генә үҙ еренең лайыҡлы шәхесе була ала.

Тел белмәгән кеше мәғлүмәтһеҙ генә түгел, илһеҙ, ерһеҙ ҡалыуы ла ихтимал. Шуға күрә лә бөгөнгө конференцияла башҡорт теленә ҡағылышлы күп проблемаларҙы хәл итербеҙ тип ышанып ҡалам.

---



## *Ҡәҙерле ҡунаҡтар!*

Һеҙҙе башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының төбәк-ара конференцияһында ҡатнашыуығыҙ менән ихлас ҡотлайым! Был байрам барыбыҙға ла ҡәҙерле. Уҡыусылар алдында һеҙ өр-яңы белем донъяһын асаһығыҙ, телебеҙгә һәм илебеҙгә һөйөү тәрбиәләйһегеҙ, юғары әхлаҡи йүнәлеш биреү йәһәтенән өлгө күрһәтәһегеҙ.

Намыҫлы хеҙмәтегеҙ, аҡыл кеүәһе һәм фиҙаҡәрлегегеҙ, сабырлыҡ һәм балаларға ихлас һөйөүегеҙ өсөн ҙур рәхмәт! Байрам менән һеҙҙе!

Барығыҙға ла күтәренке кәйеф, ижади уңыштар теләйем!

БӘЛӘБӘЙ ҠАЛАҺЫ БАШҠОРТ ГИМНАЗИЯ-ИНТЕРНАТЫ ДИРЕКТОРЫ ФӘТХЕТДИНОВА ДИЛБӘР ҒАЙСА ҠЫҘЫ

# Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының I Бөтә Рәсәй съезы

11-12 апрелдә Өфөлә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының I Бөтә Рәсәй съезы үҙҙы. Республиканың 100 йыллығына бағышланған сара «Торатау» конгресс-холы майҙансығында ойошторолдо. Съезда Башҡортостан Республикаһындағы һәм Рәсәй Федерацияһы субъекттарындағы дөйөм белем биреү ойошмаларының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары; туған телдә уҡытылған дәүләт һәм муниципаль дөйөм белем биреү ойошмалары директорҙары; муниципаль райондар һәм ҡала округтары хакимиәттәренең мәғариф идаралығы (бүлектәре) белгестәре һәм методистары; юғары уҡыу йорттары, йәмәғәтселек вәкилдәре ҡатнашты. Башҡортостандан ситтә йәшәп тә, башҡорт теленә тоғро ҡалған педагогтар ҙа саранан ситтә ҡалманы. Бәләбәй районынан мәғариф идаралығы начальнигы Лаврова Наталья Владимировна, туған телдәр буйынса методист Гәрәйева Светлана Хәтип ҡыҙы, Башҡорт гимназия-интернаты директоры Фәтхетдинова Дилбәр Ғайса ҡыҙы, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары Айгөл Шифа ҡыҙы, Рәйсә Сәлимйән ҡыҙы, Гүзәл Рәйес ҡыҙы съезд делегаттары булдылар. Съезда ҡатнашыусылар Башҡортостанда, Рәсәй төбәктәрендә башҡорт телен һаҡлау, өйрәнеү һәм үҫтереү мәсьәләләрен тикшерҙе.

"Торатау" конгресс-холында уҙған пленар ултырышта йыйылыусыларҙы Башҡортостан Республикаһы башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров тәбрикләне һәм башҡорт телен уҡытыуҙы яҡшыртыу өсөн мөһим йүнәлештәрҙе билдәләп үтте. Шулай уҡ Радий Фәрит улы бер-нисә башҡорт теле уҡытыусыһына "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы" исемен тапшырҙы, милли мәғариф ветерандарын тәбрикләү һүҙҙәре яңғыраны.

Башҡортостандың мәғариф министры вазифаһын башҡарыусы Айбулат Вәкил улы Хажин сығыш яһаны һәм бер төркөм уҡытыусыларға «Мәғариф алдынғыһы» билдәһен тапшырҙы.




Стәрлетамаҡ, Сибай, Күмертау, Ишембай, Туймазы ҡалаларында, Дүртөйлө, Дыуан, Белорет, Әбйәлил райондарында башҡорт, рус, инглиз һәм шулай уҡ көнсығыш телдәрен төплө өйрәнеү буйынса 12 лингвистик гимназия асырға тигән тәҡдим яңғыраны. Икенсенән, туған телдәрҙе өйрәнеүҙә дәртләндереү сараларын күреү, шул маҡсатта башҡорт теле буйынса олимпиадаларҙа, "Урал батыр" эпосы буйынса конкурста еңеүселәргә Башҡортостан Республикаһы башлығының махсус премияһын булдырыу; башҡорт теле буйынса регион-ара олимпиадаларҙа еңеүселәргә юғары уҡыу йорттарына ингәндә өҫтәмә балдар биреү, бөтә Рәсәй олимпиадалар исемлегенә индереү мәсьәләһен хәл итеү зарурлығы әйтелде. Шулай уҡ башҡорт теле буйынса "Йыл уҡытыусыһы" конкурсында еңеүселәрҙе дәртләндереү премияһын арттырырға тәҡдим ителде. Туған телдәр уҡытыусыларын әҙерләү, уларҙың квалификацияһын күтәреү, фәнни-методик яҡтан тәьмин итеү мәсьәләләрен хәл итеү мөһимлеге билдәләп үтелде.

Артабан съезда ҡатнашыусылар "Рәсәйҙең күп милләтле палитраһында туған телдәр: бөгөнгөһө һәм киләсәге"; "Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булараҡ башҡорт теле: тәжрибә һәм яңылыҡтар"; "Этномәҙәни белем биреү мөхите: лингвистик шәхес формалаштырыуҙа күсәгилешлек"; "Урта һәм юғары һөнәри белем биреү системаһында башҡорт теле: көнүҙәк үсеш мәсьәләләре"; "Туған телде һәм милли йолаларҙы һаҡлауҙа һәм үҫтереүҙә ғаиләнең роле"; "Башҡорт телен өйрәнеүҙә цифрлы белем биреү мөхитен булдырыу"; "Мәғариф өлкәһендә дәүләт сәйәсәте: туған телдәрҙе өйрәнеүҙең көнүҙәк мәсьәләләре" тип исемләнгән дискуссия майҙансыҡтарында эштәрен дауам итте.

Шулай уҡ "Торатау" бинаһында төрлө күргәҙмәләр эшләне, республиканың ғалимдары һәм педагогтары башҡорт телен уҡытыу һәм өйрәнеүҙә яңы интерактив технологиялар менән таныштырҙы.




Ошондай форматта ойошторолған съезд педагогтарҙы борсоған көнүҙәк проблемаларҙы хәл итеүгә йүнәлтелгән етди, башҡорт халҡы өсөн әһәмиәтле, тарихи сара. Ысынлап та, съездың бурысы башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыу проблемаларын хәл итеү генә түгел, ә халыҡты, мәҙәниәтте, илде һаҡлау. Сөнки уҡытыусылар балалар белеме өсөн генә түгел, ә халыҡ киләсәге өсөн дә яуаплы.

*А.Ш. Борисова, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.*

# Иле барҙың теле бар!

Иле барҙың теле бар тип,
Халыҡ юҡҡа әйтмәгән.
Минең изге башҡорт телем,
Ил - еремде биҙәгән.





Тыуған тел - ул һәр кемгә лә ғәзиз, изгеләрҙән-изге. Мин башҡорт булыуыма ғорурланам, кинәнеп үҙ телемдә һөйләшәм.

Атай, әсәй, ил, тел - миңә иң яҡын һүҙҙәр. Башҡорт теле бөтә йыһанға билдәле тел ул. Минең телем матур ҙа, бай ҙа, аңлайышлы ла, йомшаҡ та, нескә лә - ул һәр ерҙә яңғырай. Башҡорт теле башҡорт моңо кеүек күңелдәргә моң һала, һеңә бара. Мин телемде яратам. Башҡорт теле мәңге йәшәһен, үҫһен, илемде, еремде, халҡымдың үткәнен, бөгөнгөһөн маҡтаһын, данлаһын, телем мәңге һүнмәһен!

***Миһранова Лилиә, 3-сө г класы уҡыусыһы.***





# Туған телем

Туған тел! Тыуған ергә, Ватанға оло мөхәббәт тә туған тел аша һалына, тәрбиә һабаҡтары ла туған телдә бала бәгеренә үтеп һеңә. Әгәр мин туған телемде белмәһәм, үҙемде бәхетле тип тә әйтә алмаҫ инем. Минеңсә, башҡорт теле - иң матур, иң гүзәл тел һәм беҙ уны нисек бар шул килеш итеп, киләсәк быуынға еткерергә тейешбеҙ, сөнки ошо эш беҙҙең бурысыбыҙ.

Бөйөк шәхестәр, аҡыл эйәләре туған теленә һәр саҡ ихтирам һәм хөрмәт менән ҡараған... Әсә теле байлығына һоҡланған, табынған. Шул тел менән илебеҙҙең матди һәм рухи байлығын күтәргәндәр. Тыуған телдең кеше тормошондағы бөйөклөгөн шағирҙар үҙ шиғырҙарында данлаған.

Туған телем моңло көйөм,
Ҡолағымды иркәләй
Яңғырашың шундай наҙлы
Йырлап аҡкан шишмәләй.

Тамырҙарыбыҙ бик тәрәнгә киткән, тик уны белергә кәрәк. Әммә күптәребеҙ үҙ телен һанға һуҡмайҙар. Телен белмәгән кеше - тамырһыҙ ағас менән бер ул, ел ҡайҙа иҫһә, шул яҡҡа ауырға ғына тора. Мин туған телемде бик ныҡ яратам һәм хөрмәт итәм.

***Миһранова Юлиә, 6–сы б класы уҡыусыһы.***

***Телем менән ғорурланам!***

Урман буйлап китеп барам,
Һоҡланам ағастарға,
Улар шундай йәм-йәшелдәр,
Май айы етте беҙҙә.

Ары барам, бире барам,
Ҡоштай талпынам, осам.
Күңелдәргә тулған хисте
Шиғыр юлына һалам.

Телем минең ағас кеүек
Үҙ тамырҙарын йәйә.
Сит телде мин өйрәнһәм дә
Үҙ телем йөрәгемдә.

Туған тел - ул борондан
Беҙгә бирелеп килгән.
Күпме хурлыҡ кисерһә лә
Сафлығын юғалтмаған.

***Шәрифуллина Альбина, 8–се б класы уҡыусыһы.***



## *Үҙ еремдә дәүләт теле – башҡорт телем,*
## *Ҡотоң ҡайтһын, көсөң ташһын, даның артһын!*

***Ҡ. Аралбай.***

Тыуған телем – тыуған илгенәм
Иркәләп тә һөйөр ергенәм.
Әсәм ҡулдарының наҙы ул,
Күңелемдең шаулы яҙы ул.

Г.Ҡотоева.

Миненсә, донъялағы иң матур, иң нәфис, иң бай, иң наҙлы тел – ул башҡорт теле! Башҡортостан тигән илдә йәшәгәс башҡорт телен үстереү, өйрәнеү мөһимдер, тип уйлайым. Туған телебеҙҙә сыҡҡан телевизион тапшырыуҙарҙы ҡарау, радиотапшырыуҙары тыңлау ҙа күңеләмә илаһи моң, дәрт өҫтәй. Әлбиттә, үҙ телен һанға һуҡмаусылар ҙа осрап китә. Балаларының туған телгә, милләткә һөйөү тәрбиәләү һәр ата-әсәнең изге бурысы икәнен онотмаһындар ине. Башҡорт милләтенән булмаһалар ҙа туған телдә бер һүҙ ҙә әйтә алмаусылар етәрлек әле.

Туған тел - кешенең фекер йөрөтөү һәләтен үстерә, аҡыл үсешенә ярҙам итә. Ул баштан уҡ туған телдең бөтөн ауаздарын да үҙләштерергә тейеш. Дөрөҫ һөйләү уның һүҙ байлығын арттыра.

Һәр кеше үҙенең туған, ата-әсәһенең аҫыл телен мотлаҡ белергә, һәм әҙәбиәтте өйрәнеүгә ҙур иғтибар бүлергә тейеш.

Туған телендә көндәлек тормошонда, көнкүрештә генә аралашыу ҡоралы итеп ҡулланыу аҙ әле. Туған телде, бөтәһенән дә элек яратырға кәрәк. Яратыу ғына, бәлки, етмәйҙер. Уның мөмкин тиклем бөтә закондарын белеү мотлаҡ. Яғымлы яңғыраған, иң нескә хис-тойғоларҙы ла бай биҙәкле итеп, күп яҡлы һүрәтләү сараларын ҡулланып, һынлы итеп, төрлө шарттарҙа һәм төрлө стилдәрҙә һөйләй белергә, яҙа белергә лә кәрәк.

Әсәм теле минә сәсән теле
Унан башҡа минең халҡым юҡ,
Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юҡ.

Әсә телендә кеше илен, донъя матурлығын белә башлай. Уның шул телдә фекерләү зауығы формалаша. Уй күрке тел икән – тел күрке һүҙ. Һүҙе яғымлының үҙе лә яғымлы, теле матурҙың күңеле лә матур.

Туған тел тураһында шиғырҙар ижад итәләр, йырҙар йырлайҙар, мәҡәлдәр сығаралар. Мәҫәлән: тел - әсәнең теләге, тел - әсәнең балаһына иң ҡәҙерле бүләге. Туған телдә ҡәҙерләгән халыҡ ҡәҙерле булыр.

Шуның менән бергә әсә теле – халыҡ аҡылының, тойоуҙары һәм эштәренең ҡиммәтле хазинаһы. Уны өйрәнеү баланы халыҡтың бөтә рухы менән туғанлаштыра.

***Нәсретдинова Алһыу, 7 – се б класы уҡыусыһы.***




## *Телем*

Телем минең телкәйем!
Берҙән-берем, ҡәҙерлем!
Әлегә тиклем һаҡланың
Изге башҡорт тарихын.

Өйрәттең беҙҙе һин гел дә
Хөрмәт итә белергә,
Серле асҡыстар бирҙең,
Рәхмәт әйтәбеҙ һиңә.

***Зарипова Сафина,***
***6 – сы б класы уҡыусыһы.***



«Ынйылар»
Учредитель-Администрация МАОУ Башкирская гимназия-интернат г. Белебея РБ
Выходит с 1 сентября 2005 года.

Главный редактор З.Х.Исламова
Ответственная за выпуск З.Х. Исламова .
Верстка З.Х. Исламова
Редакция может не разделять мнение авторов статей.

Адрес редакции: 452000, РФ РБ, г. Белебей, ул. Морозова, 2, каб. №36
Телефон: 5-31-43
Email: Bel_bg@mail.ru
www.Bel-bgi.ucoz.ru

Газета выходит один раз в месяц в редакции МАОУ Башкирская гимназия-интернат г. Белебея РБ
Распространяется бесплатно.
Тираж 130 экз. 15. 05. 2019 г. 9. 00 ч.